Кеше - ул үҙе бер донъя

# Хазина

№21 (225)

“Караидель” район гәзите ҡушымтаһы
Айына ике тапҡыр сыға, шәмбе, 17 ноябрь, 2012 йыл

**Район башҡорттары Ҡоролтайы**

## Тыуған еребеҙ, тел, дин, рух - милләтебеҙҙең нигеҙе

**14 ноябрҙә Ҡариҙелдә район башҡорттары Ҡоролтайы булып үтте. 95 делегат һайланған ине, 93 кеше килде. Бынан тыш ауыл биләмәләре башлыҡтары, мәктәп директорҙары, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, китапхана мөдирҙәре, башҡорт теле һәм Башҡортостан мәҙәниәте уҡытыусылары ҡатнашты.**



**Өфө ҡунағы (уңдан икенсе) Н.Сәлимов И.Мусин, Р.Ғиниәтуллин, Г.Тимершина, Р.Вәлинуров менән әңгәмәләште.**

Ҡоролтайҙа ҡатнашыусыларҙы район хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы И.Мусин тәбрикләп сығыш яһаны.

Форум делегаттары түбәндәге мәсьәләләрҙе тикшерҙе: “Район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының отчет ваҡытында башҡарған эштәре тураһында; район мәктәптәрендә милли белем биреүҙе үҫтереү һәм Ҡоролтай эшсәнлеген артабан камиллаштырыу тураһында” (докладсы Р.Ғиниәтуллин, район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе), “Башҡорттар ҡоролтайының йәштәр советын булдырыу тураһында» (Р.Динисламова, район хакимиәтенең кадрҙар менән эшләү секторы мөдире), “Ҡариҙел районы ауылдарында башҡорттар ҡоролтайының башланғыс ойошмаһын ойоштороу тураһында» (Р.Ғиниәтуллин), «Район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының яңы составын һайлау тураһында».

Фекер алышыуҙа Яңы Бәрҙәш мәктәбенең башҡорт теле уҡытыусыһы З.Ғиндуллина, Ҡариҙел ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Р.Вәлинуров, район гәзите мөхәррире урынбаҫары, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты, Ғаян Лоҡманов исемендәге әҙәби премия лауреаты Г.Тимершина, тарихсы, Ғаян Лоҡманов исемендәге әҙәби премия лауреаты, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты Ф.Сафин, 1-се Ҡариҙел мәктәбе уҡытыусыһы, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты А.Нәсәбетдинова һәм башҡалар ҡатнашты.

«Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы» йәмәғәт ойошмаһы халыҡ-ара союзы башҡарма комитеты ағзаһы, «Башҡортостан» гәзите мөхәррире Н.Б.Сәлимовтың сығышы фәһемле булды.

Делегаттар Башҡорттар ҡоролтайының йәштәр советын ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул итте.

«Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы» йәмәғәт ойошмаһының халыҡ-ара союзы Уставына һәм район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының эш планына таянып, делегаттар Ҡариҙел районы муниципаль районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының яңы составын һайланы.

Ҡариҙел районы МР башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе итеп Р.Ғиниәтуллин һайланды.

Башҡарма комитеттың яңы составына мөрәжәғәт итеп, Илдус Ғаяз улы Мусин былай тине: «Һайланыуығыҙ уңайынан ысын күңелдән ҡотлайбыҙ. Был эш мәшәҡәтле, ҙур сәйәси һәм идеологик әһәмиәткә эйә. Уңыштар теләйбеҙ! Шуның менән бергә элекке составҡа рәхмәт әйтергә теләйем. Һөҙөмтәле һәм уңышлы эшләнегеҙ, район тормошонда, телде, мәҙәниәтте үҫтереүҙә актив ҡатнаштығыҙ - районыбыҙ ерендә башҡорт, татар, рус, мари һәм башҡа милләт кешеләре араһында татыулыҡ, үҙ ара хөрмәт мөнәсәбәттәрен нығытыуҙа ҙур тырышлыҡ һалдығыҙ»

Һуңынан ҡоролтай эшсәнлегендә әүҙем ҡатнашҡан кешеләрҙе Маҡтау ҡағыҙы менән бүләкләү булды.

**Г.Ризаева.**

*Д.Гәрәев фотоһы.*

**Бөгөн - Өфөлә Салауат Юлаев һәйкәлен асыуға 45 йыл**

## Салауат нисә йәшендә?



**Салауат Юлаев һәйкәле баш ҡалабыҙ Өфөнөң архитектура ансамблендә мөһим урын биләй. Скульптор-монументалист Сосланбәк Дафа улы Тавасиев ижад иткән был ҡомартҡы ҡалаға килеүселәрҙе сәләмләп ҡаршылай.**

Сосланбәк Тавасиев был эшкә үҙенең 20 йыл ғүмерен бағышлай. 1967 йылда асылған һәйкәл эргәһендәге майҙан Башҡортостандың, уның баш ҡалаһы Өфөнөң ғәжәйеп бер әҙәби һәм мәҙәни үҙәгенә әйләнгән.

“Салауат нисә йәшендә?” тип башлана халыҡ йыры. Салауаттың йәше һанауға мохтаж түгел, сөнки ул мәңгелек. Металда һынландырылған батыр быны тағы бер дәлилләй. Өлкәндәр ҙә, йәштәр ҙә үҙ итеп, һағынып килә Салауатты... Әле генә Никах һарайында ғаилә ҡороуҙарын теркәгән ғашиҡ парҙар ҙа бер-бер артлы батыр һәйкәленә гөлләмәләр бүләк итеп ҡалдыра. Улар ҡорған ғаиләләр ҡоростай ныҡ, батырыбыҙ кеүек илһамлы, рухлы, ҡаҡшамаҫ булһын, тип теләге килә.

Күкрәктәре орден-миҙалдар менән тулы олпат олатайҙар һәм өләсәйҙәр ҙә батыр һәйкәле янына ихлас теләк, изге уйҙар менән юллана. Күптәре ейән-ейәнсәрен етәкләгән. Тимәк, быуындар күсәгилешлеге аша батыр рухы күсә, тағы ла ҡеүәтләнә, арта.

Ә кистәрен һәйкәл тирәһе умарта иләүендәй гөжләй. Бер-бер артлы ғашиҡ егеттәр һәм ҡыҙҙар парлашып уҙа.

«Салауат нисә йәшендә?» Йәп-йәш ул әле. Йырҙа ла бит шулай йырлана:

***Салауат нисә йәшендә?***
***Йәшел ҡамсат бүрке башында.***
***Салауаттың йәшен һораһағыҙ,***
***Егерме лә ике йәшендә.***

Тап ошонда килгән йәштәр кеүек. Улар менән бергә ҡурай уйнай, йырлай, бейей төҫлө.

Киләсәктә лә батырыбыҙ беҙҙе лә, ҡунаҡтарҙы ла ихлас ҡаршылап торһон. Беҙ уны һағынып киләйек, сәскә гөлләмәләре бүләк итәйек...

**З.Алтынбаева.**

## «Хазина»ға шул хаҡ менән!




*Хөрмәтле дуҫтар!*

***1 сентябрҙән киләһе йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға, шулай уҡ «Караидел хәбәрләре» һәм «Хазина» ға подписка башланды.***

***Шулай ҙа, икенсе ярты йыллыҡҡа гәзитте алдырыу өсөн, һәр айҙың 20-һенә тиклем яҙылһағыҙ, «Хазина» һеҙгә киләһе айҙан килә башлаясаҡ.***

***Башҡорт телендә сыҡҡан район гәзите ҡушымтаһы менән киләсәктә лә бергә булығыҙ, ҡәҙерле уҡыусылар. Шулай уҡ яҡындарығыҙға, дуҫтарығыҙға, малай-ҡыҙҙарығыҙға «Хазина»ны бүләк итергә онотмағыҙ. Һеҙҙән, шулай уҡ, ауыл тормошо, тарихы хаҡында яҙылған хаттар, яҡын кешеләрегеҙгә ҡотлауҙар көтөп ҡалабыҙ.***

*“Хазина”ға ярты йылға яҙылыу хаҡы - 88 һум 44 тин.*
*Индексы - 50713*

Дан ғаиләләр

# Тормоштан йәм табып йәшәй



**- Өҫтәлдә икмәк булһа, тормош та йәмле була шул, балалар, - тип йыш ҡабатлай Әлфинә апай.**

**Һөләймән ауылында ябай хеҙмәт кешеләре йәшәй. Улар бәхет эҙләп ситкә сығып китмәгән. Ғаиләһен дә бик матур итеп ҡора. Һәр ҡайһыһы үҙ төйәгенә йәм өҫтәп, хеҙмәтенән тәм табып ғүмер итә.**

Йәштәр өй күтәрә, баҡсала еләк-емеш, йәшелсә үҫтерә, мал аҫрай, балалар тәрбиәләй. Үрнәк алырҙай күп бала тәрбиәләп үҫтергән әсәйҙәр бар. Хаҡлы ялда булһалар ҙа, һаман да балаларына ярҙам итеп, күркәм, етеш донъя көтә. Уларҙың күкрәген «Әсәлек даны» миҙалы биҙәй. Шундайҙарҙың береһе - ауылдың хөрмәтле кешеһе, биш бала әсәһе, хеҙмәт ветераны Әлфинә Мортаза ҡыҙы Зарипова. Әлфинә апай 1944 йылда Һөйөндөк ауылында тыуған. Етенсе класты тамамлағас, колхозда хеҙмәт юлын башлаған. Ул тәүҙә фермала һарыҡ көтә, һуңыраҡ быҙау ҡарай. 35 йыл хеҙмәт стажы туплаған хөрмәтле ветеран ул. Һуңғы 9 йылын ашнаҡсы булып эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан.

20 йәшендә үҙенең ғүмерлек мөхәббәтен, Һөләйман егетен Фаһаман Үлмәҫкул улын осрата. Йәштәр өй һалып сығып, мал ишәйтеп, ғаилә ҡороп йәшәй башлай. Зариповтарҙың матур ғаиләһендә дүрт ҡыҙ, бер малай тәрбиәләнә. Атаәсәнең йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәгән балалары. Һәр ҡайһыһының ятраҡан һөнәре, эше, үҙ ғаиләһе бар.

- Мейесемдә икмәк, шәңгә һалып, ашымды бешереп, сәйемде ҡайнатып, ҡаймаҡ, май яһап көтөп торам балаларымды. Улар йыш ҡайтып хәлемде белеп тора, йәйен бесәнгә ярҙам итәләр. Шуға ла һыйыр ҡарап, ҡош-ҡорт үрсетергә хәлемдән килә. Хәҙер ҡыҙҙарым, улым менән бергә ете ейән-ейәнсәрем, өс бүләсәм дә ҡайта. Уларҙың иҫән-һау, тәрбиәле булыуҙары мине бик һөйөндөрә. Буш ваҡытымда ҡул эштәре менән булышам. Һарыҡтарым иҫән йөрөһөн. Балаҡайҙарым ҡышҡы һалҡындарҙа өшөп йөрөмәһен өсөн, йөрәк емештәремдең барыһына ла йылы ойоҡбаш-бейәләй өлгөртөргә тырышам, - тип әле лә бәләкәстәренең һаулығын хәстәрләй бәхетле өләсәй.

Эйе, һөйгән йәре менән Әлфинә апай 40 йыл ғүмер иткән. Хәҙер һигеҙ йыл Әлфинә апай балаларын ҡаршылап, атай нигеҙен һыуытмай, яңғыҙы донъяһын көтә.

- Тыныслыҡ, именлек яҡлы булып, рухи тамырҙарыбыҙҙан көс алып йәшәйбеҙ. Телебеҙ башҡаларҙан һис тә кәм түгел, Күп милләтле төбәгебеҙҙә халыҡ-ара дуҫлыҡ, татыулыҡ һаҡлана. Телде, мәҙәниәтте, йолаларҙы тергеҙеү, уларҙы киләсәк быуындарға еткереү өсөн төрлө саралар ойошторола. Балаларға милли исемдәр ҡушыла, дингә ҡараш ыңғай яҡҡа үҙгәрә, мәсеткә йөрөүселәр, иманға килеүселәр, ураҙа тотоусылар һаны йылдан-йыл арта. Шундай бай тәбиғәтле, гүзәл ерҙә йәшәү — үҙе бәхет. Ошо матурлыҡтан илһам алып, урмандарында саф һауа һыулап ғүмер итәбеҙ, - ти Әлфинә Мортаза ҡыҙы.

Ҡунаҡсыл, тормоштан йәм табып йәшәүсе Әлфинә апайҙан өлгө алырға була. Уның ырыҫлы өйө бушап, күңелһеҙ тынлыҡта ҡалғаны юҡ. Ял көндәрендә, байрамдарҙа был йорт тағы ла йәмләнә, балалары, ейән-ейәнсәрҙәре килеп уны шат тауышҡа күмә.

**Л.Карамова.**

*Ә.Мөхтәсәров фотоһы.*

Хәтер

# Һағышлы күңел

*Иртән тороп күккә бағам -*
*Күренмәҫме торналар?*
*Атай-әсәйһеҙ ҡалғастын*
*Ауыр икән донъялар.*

*Бәхет тауҙары булһа ла,*
*Һеҙһеҙ мин меңәлмәнем,*
*Ҡара көҙҙә етем тороп*
*Ҡалырымды белмәнем.*

*Күк күгәрсендәр күрәм дә,*
*Ике күҙем йәш түгә.*
*Йөрәккенәм түҙмәгәндә,*
*Пар ҡәбергә мин киләм.*

*Ниңә икегеҙ бер көндө*
*Был донъянан киттегеҙ,*
*Һөйөләһе балағыҙҙы*
*Зарлы етем иттегеҙ.*

*Инде хәҙер төшкә генә*
*Күрер көнгә ҡалдығыҙ,*
*Ә йөрәккә мәңге бөтмәҫ*
*Ҡара ҡайғы һалдығыҙ.*

*Көҙҙәр етте, ҡоштар китә,*
*Кире ҡайтырҙар микән?*
*Минең нисек зар илауҙы*
*Бер аҙ беләһегеҙ микән?*

*Баҙарға барһам, алам*
*Сәскәнең алһыуҙарын.*
*Ҡәберегеҙгә ҡуям*
*Гөлдәрҙең аҫылдарын.*

*Ҡара көҙҙөң ҡара ере*
*Илатып тартып алды.*
*Ғүмерең, әсәй, ҡыҫҡа булды*
*Бөтмәҫ һағыштар ҡалды.*

*Әсәкәйем, һис онотмам*
*Йөҙөңдөң яҡтылығын.*
*Иртә-кисен теләйем мин*
*Ожмахтың яҡшырағын.*

*Хәтирәләр ауыр ҙа ул,*
*Онотorға юҡ хаҡым.*
*Һеҙҙе өҙөләп һағыныуҙан*
*Күңелдә һағыш-ялҡын.*

**Л.Ғизәрова.**

*Ҡариҙел.*

Осрашыуҙар

# Бала хоҡуғына етди иғтибар кәрәк

ИМЕН БАЛА САҠ ҺӘМ ҒАИЛӘ ҠИММӘТТӘРЕН НЫҒЫТЫУ ЙЫЛЫ 2012 ГОД БЛАГОПОЛУЧНОГО ДЕТСТВА И УКРЕПЛЕНИЯ СЕМЕЙНЫХ ЦЕННОСТЕЙ

**Республика йортонда Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың Өфөгә эш сәфәре менән килгән Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Павел Астахов менән осрашыуы булды. Унда әсәлекте һәм балалыҡты һаҡлау, ишле, һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән сабый тәрбиәләгән ғаиләләрҙең көнүҙәк мәсьәләләрен хәл итеү юлдары тикшерелде.**

Рөстәм Хәмитов менән Павел Астахов Рәсәй төбәктәрендәге бала хоҡуҡтары буйынса вәкилдәрҙең киләһе йыл Өфөлә үтәсәк VII съезына әҙерлек мәсьәләһенә бәйле фекер алышты.

- Бала хоҡуҡтарына беҙ ярайһы уҡ ҙур иғтибар бирәбеҙ. әлбиттә, һеҙҙең ярҙамға, артабан эш итеү буйынса тәкдимдәрегеҙгә лә иҫәп тотабыҙ. Эште әүҙем алып барабыҙ, был теманы иғтибар үҙәгенән төшөрмәйбеҙ, - тине Башҡортостан Президенты. - Ҡулдан килгәнсә матди яҡтан, ойоштороу йәһәтенән дә, идара итеү буйынса ла булышлыҡ итергә тырышабыҙ. Әлбиттә, бөтәһенә лә көс етмәй, шулай ҙа беҙ алға барабыҙ. Етем балалар өсөн торлаҡ төҙөйбөҙ, яңы үҙәктәр асабыҙ, поликлиникалар, башҡа объекттар һалабыҙ. Хатта бюджеттағы ҡытлыҡ шарттарында ла был эште мотлаҡ башҡарыу зарурлығын аңлайбыҙ. Балалар мәсьәләһе тәү сиратта хәл ителергә тейеш.

Рөстәм Хәмитов Павел Астаховҡа быйыл республикала өс һәм унан күберәк балалы ғаиләләргә күпләп ер участкалары бирелә башлауын хәбәр итте. Бынан тыш, инвалид сабый тәрбиәләгән ғаиләләргә лә бушлай ер бүленәсәк.

- Тапшырылырға тейешле 35 мең участкаға тағы ла яҡынса 10-12 меңде өҫтәргә кәрәк. Минеңсә, быйыл шуның 5-6 меңен тапшырасаҡбыҙ. Әлбиттә, был эш Өфөлә ауыр бара, сөнки ҙур ҡалаларҙа ер етмәй. Ләкин беҙ мәсьәләне хәл итеү юлын таптыҡ. Быйыл күп балалы һәм мөмкинлеге сикләнгән сабый тәрбиәләгән 1,5 мең ғаиләгә, республика буйынса алғанда, 3,5 - 4,5 мең ғаиләгә, тәүге сертификаттар тапшырыласаҡ, - тине Башҡортостан Президенты.

- Ике йыл элек, һеҙ тәғәйенләнгәндән һуң бер аҙ ваҡыт үткәс, Башҡортостанға килгәйнем. Балалыҡты яҡлау мәсьәләләренә ҙур иғтибар биреү зарурлығын һеҙ шунда уҡ аңлай инегеҙ, - тине Павел Астахов. - Лилиә Салауат ҡыҙы миңә шылтыратты, ике аҙна үттеме-юҡмы, тәрбиәгә бала алған ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү буйынса Закон ҡабул иттегеҙ. Был бик мөһим. Беҙ белдергән тәкдимдәрҙең барыһы ла иҫәпкә алынған. Арабыҙҙа яҡшы бәйләнеш барлыҡҡа килде, был йәһәттән беҙ - партнерҙар, тип уйлайым.

*Республика башлығының матбуғат хеҙмәте.*

Илһам шишмәләре

# Ауылдың киләсәге бар



**Районыбыҙҙа үҙенең төҙөклөгө, гүзәл тәбиғәте, егәрле һәм уңған кешеләре менән айырылып торған ауылдар бик күп. Һәр кемдең үҙ ауылы үҙенә яҡын, ҡәҙерле. Сит ерҙәргә сығып китһәк тә, тыуған яҡҡа барыбер күңел тарта. Атай нигеҙен, әсәйебеҙҙе һағынып ҡайтып етәбеҙ.**

Мин иҫ киткес матур ауылдарҙың береһе Ҡариҙел районы Асҡыш ауылының йәшел сиҙәмендә аунап үҫкәнмен. Ысынлап та, ауылымдың тәбиғәте бигерәк матур. Бәләкәс кенә төйәгемде ожмахтың үҙе менән тиңләр инем. Тәбиғәттең иң матур урынына килеп төпләнгән шул ата-бабаларым. Ауылды уратып алған ғорур тауҙар, әкиәттәге батырҙар кеүек һаҡҡа баҫҡандар. Урманыбыҙ иһә — бигерәк бай. Йәйен ниндәй генә еләк-емеш бешмәй унда! Рәхәтләнеп йыйғына. Алыҫ илдәрҙә көн иткән ауылдаштарыбыҙ ҙа йәй һайын ҡунаҡҡа ҡайта. Һәр миҙгелдең матурлығын беҙҙең яҡҡа килеп кенә айырым-асыҡ күреп булалыр ул. Ҡыш-үтә зәһәр, яҙ шул тиклем ярһыу, йәй — наҙлы, көҙ уңыштан, муллыҡтан һығылып-бөгөлөп тора. Бына шундай минең ауылым. Беҙҙең ерҙәр шул тиклем күркәм. Ләкин ошо гүзәллекте һаҡлай, ҡәҙерләй белергә генә кәрәк. Ауылым бәләкәй генә булһа ла, киләсәге бар тип уйлайым. Сөнки бында уңған, тырыш кешеләр йәшәй. Төпкөл тип ҡарап тормайҙар, ҙур итеп йорттар һалып, гөрләтеп донъя көтәләр.

**А.Әхмәтшин.**

Шәжәрә байрамы

# Тарихымды онотмам, тамырымды ҡоротмам




**Рухы, күңеле бай кеше, ул ниндәй халыҡтан ғына булмаһын, кешене лә, уның телен дә, динен дә хөрмәтләй белә.**

**Шәжәрә – ырыу тарихының йылъяҙмаһы. Башҡорттарҙа борон-борондан үҙенең ырыу шәжәрәһен яҙыу һәм уны һаҡлау йолаһы йәшәгән. Халыҡ тарихын өйрәнеүҙә шәжәрәләрҙең әһәмиәте ҙур.**

3 ноябрҙә Байҡыбаш ауылында шәжәрә байрамы үтте. Был күркәм сараны ауыл мәҙәниәт йорто директоры Вәкилә Мәғәрүф ҡыҙы Ғәлиәскәрова ойошторҙо. Данлыҡлы Ирғәле нәҫеленең вәкилдәре шәжәрә байрамына бик һәйбәт әҙерләнгән. Мәҙәниәт йортоноң залы һәм уның тирә-яғы зауыҡ менән биҙәлгән. Краснохолм мәктәбенең тарих уҡытыусыһы, РФ мәғариф отличнигы Хәдисә Мәғәрүф ҡыҙы Нуруллина үҙҙәренең ырыуҙар тарихын өйрәнеп, Ирғәле нәҫеле тураһында мәғлүмәттәр йыйып, 350 кешенән торған шәжәрә ағасын төҙөгән. Ул был йыйыйнда Тарих биттәре рубрикаһын алып барҙы. Туған-тыумасалар, килендәр, еңгәләр берләшеп аш-һыу бешергән, милли ҡамыр ризыҡтары (шәңгә, сәк-сәк, бауырһаҡ, бәлеш һ.б.) өҫтәлдә һығылдыра.

Шәжәрә байрамы Юлдаш каналына Яр Саллы ҡалаһынан килгән музыкаль бүләк менән башланып китте. Был хатты туғандарына йәшәүсе Гөлнара Фәрит ҡыҙы Ғәлләмова яҙып ебәргән.

- Ата-бабаларыбыҙҙың тамырҙарын онотмайынса, бөгөн минең йыр-моңға ғашиҡ ҡан-ҡәрҙәштәрем шәжәрә байрамына йыйылды. Тормош мәшәҡәттәре арҡаһында, ошо осрашыуға беҙ ҡайталманыҡ, шулай ҙа күңелебеҙ һеҙҙең менән, ҡәҙерле туғандарым. Уңыштарығыҙға ҡыуанабыҙ, һеҙҙең менән ғорурланабыҙ, бәхетле булығыҙ, - тип яҙылған был сәләм хатында. Рүмиҙә Әхмәтйәнова башҡарыуында Вәкилә Ғәлиәскәрова иждат иткән «Ҡариҙелем» йырын тапшырыуҙы ла һорағандар.

Был матур тапшырыуҙан һуң Благовещен ҡалаһы аҡһаҡалы Дамир хәҙрәт үҙенең матур теләктәрен әйтте.

- Үткән заман менән хәҙергеһен сағыштырһаң, бөгөнгө тормош ожмах кеүек. Тыныс тормошобоҙға шөкөр итеп, өмөтлө киләсәгебеҙ өсөн шатланып, тыуған еребеҙҙә имен йәшәргә яҙһын, - тип доға ҡылды. - Беҙ – Ирғәле нәҫеленән, Балыҡсы ырыуынан, ғорур баҫып торамын, Салауат, - тип ораным. Тамғам минең ҡабырға, алмағасым – ағасым. Ҡошом минең – ыласын, - тип һүҙен тамамланы ул.

Шунан һуң һүҙҙе арабыҙҙағы иң оло кешебеҙ, Сталин миҙалы, Башҡортостандың ауыл хужалығы министрлығы һәм район Маҡтау ҡағыҙҙарына лайыҡ, шахмат буйынса республика чемпионы, үҙ заманында Салауат колхозының хөрмәт ҡаҙанған мал табибы, 82 йәшлек Муллаян Ғайнан улы Ирғәлин алды. Уның сығышын иғтибар менән тыңланылар. Ул, тарихи сығанаҡтарға таянып, үҙенең нәҫеле тураһында күп кенә мәғлүмәт туплаған. Шәжәрә ағасы ла уның ярҙамы менән төҙөлгән.

- Ирғәле нәҫеленең дауамы беҙ, ошо кешеләрҙән тыуған балалар, хәҙер бабайҙар, әбейҙәр, ҡартатайҙар, ҡартинәйҙәр һәм дә һеҙ – сабыйҙар, киләсәк быуыныбыҙ, - тине ул.

Аҡһаҡалдарҙың сығыштарынан һуң, ошо нәҫелдең талант эйәләре: баянистар, йырсылар ҡатнашлығындағы концерт номерҙары байрам кәйефен тағы ла нығыраҡ күтәреп ебәрҙе. Заһит Фәзлетдинов менән Алһыу Ғилмалетдинова «Иҫәндәрҙең ҡәҙерен бел, үлгәндәрҙең ҡәберен бел» йырын башҡарҙы.

Салауат колхозында 40 йылдан ашыу баш хисапсы булып эшләгән Ғәлихан ағайҙың балалары Рәмил менән Шамил Ғайнановтар тыуған яҡта төпләнеп, яңы йорттарҙа сабыйҙар үҫтереп, үҙҙәре олатай-өләсәй булып, ейән-ейәнсәрҙәренә ҡыуанып донъя көтәләр. Флүзә ҡыҙҙары Ҡыйғы районында медицина хеҙмәткәре. Улар өсөн музыкаль бүләк - Фәридә Ғилмалетдинова башҡарыуында туғандарға бағышланған йыр.

Шуныһы ҡыуаныслы, күптәр бәхет эҙләп ситкә сығып китмәгән. Бер-береһе менән татыу, туғанлыҡ ептәрен өҙмәйенсә, ҡунаҡлашып ғүмер итә.

Оҙаҡ йылдар Иҫке Аҡбүләк, Абдулла, Байҡы, Яңы-Бәрҙәш ауыл советы рәйесе Миңләәхмәт Ирғәлин олатайҙың, бер туған һеңлеһе Миңлесорур улы Туктағол Мөхәмәтйәнов ғүмер буйы Салауат колхозының партком рәйесе вазифаһын үтәгән. Уның улдары Ирек, Рөстәм, Илфар районда ҙур танылыу алған шәхестәр.

Алма ағасынан алыҫ төшмәй тигәндәй, Миңләәхмәт олатайҙың үҙенә оҡшап балалары ла актив позициялы булған. Биш ҡыҙ, бер ул үҫтергән ул Идая, Кәфиә, Сания, Тәнзилә, Мәрфуға һәм Миңлеүҙбәк.

Ун бала әсәһе Идая ағинәйҙең Өфө ҡалаһында йәшәүсе отставкалағы офицер улы Фәнәүи, Аҫҡындағы ҡыҙы Рәфизә апайҙың һәләтле ейән-ейәнсәрҙәренең йыр-бейеүҙәре, барлыҡ туғандар өсөн ҙур бүләк булды.

Ошо байрам кисәһен алып барыусылар, Кәфиә инәйҙең балалары, биш бер туған Зәһиә, Хәдисә, Вәкилә, Әсбирә, Заһит сәхнә түренә күтәрелде. Уларҙың һәр береһе нәфис һүҙ оҫтаһы, йыр-бейеүгә һәләтле булыуы күптәргә таныш.



Ирғәле нәҫелен дауам итеүсе ир-егеттәр.



Нәҫелебеҙ дауамы - беҙҙең белемле ул-ҡыҙҙарыбыҙ.

Аҫҡында йәшәгән Сания инәйҙең ҡыҙы Әнфисә апай әсәләргә бағышлап һөйләгән шиғыры менән күңелдәрҙе тетрәндерҙе, ейәнсәре Алһыу үҙҙәренең ғаиләһе тураһында һөйләне.

Ирғәле нәҫел ебен дауам итеүсе берҙән-бер улы Миңлеүзбәктең улы Илшат һәм ҡыҙы Лүзидә лә туғандарын хөрмәт итеп алыҫ араларҙы яҡын итеп килеп етте. Ҡариҙел дауаханаһына эшкә килгән йәш белгес, терапевт, уларҙың килендәре Әлиә моңло тауышы менән туғандар күңелен яуланы.

Сабрикамал өләсәй яғынан да туған-тыумасалар бергә йыйылып, күрешеп-һөйләшеүҙәр бик ҡыуандырҙы.

Байрам тамамланды, ҡунаҡтар таралышырға ашыҡманы. Был матур көн хәтирәләре һәр кемдең күңелен оҙаҡ йылытып торор әле.

- Һөйләгәндәрҙе барлап, үткәндәрҙән һабаҡ алып, киләсәкте уйлап йәшәргә кәрәк. Быуындар араһында бушлыҡ булмаһын. Нисек беҙ, өлкән йәштәге туғандар татыу, берҙәм йәшәйбеҙ, балаларыбыҙ ҙа бер-береһен белеп, ҡулға-ҡул тотоношоп, туғанлыҡ ептәрен өҙмәйенсә йәшәһә, ошо сакта ғына тормошобоҙ күркәм, мул һәм мәрхәмәтле булыр. Беҙ быға ышанабыҙ, - тигән уйҙа ҡалды туғандар.

**Ф.Хәмиҙуллина.**




Данлыҡлы Ирғәле нәҫеленең татыу, берҙәм төрлө быуын вәкилдәре.



# Мәскәүҙә лә булдыҡ беҙ!

**(Башҡорттар 1612 йылдағы һуғышта)**

2012 йылдың ноябрендә илебеҙ Икенсе ополчение көстәре менән Мәскәүҙе азат итеүгә 400 йыл тулыуҙы билдәләй. Ошонон менән ул саҡтағы буталсыҡ дәүер – Рәсәйҙә беренсе граждандар һуғышы тамам була. Был хәлдең Башҡортостанға һәм башҡорттарға туранан-тура бәйләнеше бар, сөнки беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ул заманда поляк илбаҫарҙары һәм Лжедмитрий II отрядтарына ҡаршы һуғышта әүҙем ҡатнашҡан.

1608-1609 йылдарҙа Рәсәйҙә ике власлылыҡ барлыҡҡа килә. Мәскәү Кремлендә законлы батша Василий Шуйский ултыра, ә Мәскәүгә алыҫ та түгел Тушинола самозванец, тарихта Лжедмитрий ике исем менән билдәле, үҙен батша улы Дмитрий Иванович тип атаусы берәү лагерь тота. Василий Шуйскийҙы Земский собор һайламай, ә Бояр думаһы ғына һайлап ҡуя, шуға ул халыҡ араһында тулы ышаныс һәм хуплау таба алмай. Поляктарҙың килеп ҡатнашыуы хәлде тағы ла ҡатмарландырып ебәрә. Ә 1909 йылда поляк-литва интервенцияһы башлана. Ил ике лагерға бүленә, ҡала һәм ерҙәрҙең күпселек өлөшө самозванецҡа тоғролоҡҡа ант итә. Уны бары тик Бөйөк Новгород, Смоленск, Рязань, Коломна, Ҡазан ҡалаларында, Себерҙә танымайҙар. Самозванец бөтә ил буйлап үҙ отрядтарын юллай. Уларҙы «литва кешеләре» оҙата бара, ошо отрядтар самозванецты батша тип таныуға мәжбүр итә, халыҡты уға подданный булыуға ант иттерә, бер үк ваҡытта Василий Шуйский власы вәкилдәрен юҡ итәләр. Татар, сыуаш, мари милләттәренең бер өлөшө “тушинолар”ға ҡушыла. Мәсәлән, 1610 йылда Арзамас татарҙары Лжедмитрий яғында һуғыша, шул уҡ ваҡытта уларҙың ҡайһы берәүҙәре уға ҡаршы һуғышҡан отрядтарҙа була. 1608 йылдың көҙөнән башлап Урта Иҙелдә законлы власть һәм самозванец тарафтары араһында ҡанлы бәрелештәр булып тора. Баш күтәргән мари, татар, сыуаш, мордва һәм “тушинолар” Ҡазан менән Түбәнге Новгородты ҡамап ала һәм илдең башҡа биләмәләренән бүлеп ҡуя.

Башҡорттар ил ауыр хәлдә ҡалған мәлдә самозванец вәғәҙәһенә алданмай, дәүләт алдындағы бурысына, Мәскәү батшаһына биргән антына тоғро ҡала. Улар хөкүмәт ғәскәрҙәре менән бергә хәрәкәт итә һәм самозванец отрядтарына, интервенттарға ҡаршы көрәштә әүҙемлек күрһәтә.

1606 йылдың яҙында воеводаны һәм отрядтарҙы алыштырыу ниәте менән боярин Ф.И.Шереметьев ҡул аҫтында ҙур ғәскәр туплана һәм хеҙмәт итеү өсөн Әстерханға, Түбәнге Иҙелгә оҙатыла. Был отрядтар «Понизовая рать» тип атала. Мәскәү уҡсылары, шулай уҡ Нижгород һәм Арзамас дворяндары ғәскәрҙең төп өлөшөн тәшкил итә. 1608 йылда Василий Шуйский хөкүмәте был көстәрҙе ярҙамға саҡыра һәм ишле отрядтар Царицындан сығып Ҡазан һәм Чебоксарға йүнәлә. Бында, Урта Иҙелдә, уларға И.Н.Салтыков, боярин И.В.Голицын, окольный кенәз Д.В.Туренин һәм башҡа командирҙарҙың отрядтары ҡушыла. 1608 йылдың 1 декабрендә А.А.Микулин һәм Б.А.Износков етәкләгән отряд һуғыша-һуғыша ҡамауҙағы Түбәнге Новгородҡа барып етә. Был отрядтар составында дворяндар, уҡсылар, Әстерхан ҡаҙаҡтары һәм сыуаштар менән бергә башҡорттар ҙа булған. Берләшкән ғәскәргә воевода А.С.Алабьев башлыҡ була. 2 декабрҙә уның отряды «тушиносылар”ҙан Балахнаны азат итә. Ә бишендә ҡаланы солғаныштa тотҡан бөтә отрядтарын ҡыйрата. Унынсы декабрҙә Ворема ауылы эргәһендә ҙур һуғыш була. Унда Алабьев отряды боласыларҙы йөнә тар-мар итә. Был бәрелештә башҡорттар айырылып тора. Ворема талана һәм яндырыла, ә Павлово ауылына сигенеүсе Лжедмитрий тарафдары тағы ла еңелеүгә дусар була.

1609 йылдың ғинуар айы башында башҡорттар Алабьев отряды составында Муровҡа ҡарай хәрәкәт итә башлай һәм ҡаланы солғап ала. 27 мартта ғәскәрҙең бер өлөшө (сама менән мең кеше) Владимирға яҡыная. Быны белеп ҡалғас, ҡала халҡы баш күтәрә һәм В.Шуйскийға тоғро булырға ант бирә. Апрель-май айҙарында Алабьев отрядтары ул саҡ «тушиносылар” ҡулында булған Ҡасим ҡалаһына рейд яһай. 1609-1610 йылдар ҡышында хөкүмәт ғәскәрҙәре ныҡышмалы бәрелештәрҙә Мәскәү тирәһендә самозванец көстәрен ҡыйрата һәм 1610 йылдың мартында ҡалаға үтә. Мәскәү ҡулға төшөү менән Нижегородканың служилый кешеләре өйҙәренә ҡайтарыла. Күрәһең, улар менән бергә үҙ бурыстарын үтәгән башҡорттар ҙа ҡайтырға сыҡҡандыр.

Ләкин һуғыш хәрәкәттәре туҡталмай әле: Речь Посполитая яуы янынан Мәскәүҙе баҫып ала, ә 1610-1611 йылдар ҡышында ополчение ойоша. Һуңынан ул Беренсе ополчение тип атала. Законлы власть булмау сәбәпле, дворян П.П.Ляпунов, боярин кенәз Д.Т.Трубецкой һәм ҡаҙаҡ атаманы И.М.Заруцкий уның етәкселәре булып китә. 1611 йылдың февралендә Түбәнге Новгородтан «Понизовая рать»тың төп көстәре походҡа сыға. Ғәскәр башында Новгородтың беренсе воеводаһы кенәз А.Репнин тора. Был ополчение эштәре көтөлгәнсә уңышлы бармай. Мәскәүҙе азат итеп булмай. Ҡаҙаҡтар кругында (йыйынында) Ляпунов үлтерелә. Баш ҡаланы алырға маташыусы ополчение ҡаҙаҡ «таборына» әйләнә һәм еңелеп ҡала.

Беренсе ополчениеның еңелеүе Икенсеһен төҙөүгә сәбәп була. К.З.Минин һәм кенәз Д.М.Пожарский туплаған ополчение 1612 йылдың 20 августында Мәскәү эргәһенә килеп етә һәм Арбат ҡапҡаһы ҡаршында позицияға урынлаша. 21 августа Мәскәү гарнизонына ярҙамға гетман Ян Ходкевич поляктары яуы килеп етә. Икенсе көндә гетман ғәскәре Пожарский менән алышҡа инә. Поляктарға көтөлмәгән һөжүм яһала һәм уларға сигенергә тура килә. 24 августа поляк-литва ғәскәре менән ополченецтар араһында икенсе бәрелеш була. Аяуһыҙ һуғышта поляктар ополченецтарҙың оборонаһын өҙөүгә ирешә һәм уларҙы бер ни ҡәҙәр кире сиктерә. Был яман хәлдән Минин ҡотҡара. Ул үҙе төнгә атаҡаға командалыҡ итә һәм поляктар артҡа алып ташлана. Һөжүмтәлә, ҙур юғалтыуҙарға дусар ителгән һәм ярҙам ала алмаған Ходкевич ғәскәре 28 августа Мәскәүҙән сигенә, 27 октябрҙә инде поляк гарнизоны капитуляция яһай. Ополченецтар, шул иҫәптән башҡорттар, илбаҫарҙарҙан ҡотолған Кремлгә инә.

Күреүебеҙсә, башҡорт атлылары тәүҙә боярин кенәз Д.Т.Трубецкой етәкселегендәге Беренсе ополчение составына, унан һуң К.З.Минин һәм Д.М.Пожарский баш булған Икенсе ополчениеға инә һәм Мәскәүҙе Польша интервенттарынан азат итеү өсөн барған һуғыштарҙа ҡатнаша.

Был фактты батша Алексей Михайловичтың Өфө воеводаһы Ф.А.Алабьевҡа биргән грамотаһы ла раҫлай. Унда былай тиелә: “Башҡорттар элекке государь ваҡытында ла, беҙҙең атабыҙ тупрағына баш эйгән, Бөтә Рәсәйҙең бөйөк государе һәм бөйөк кенәзе Михаил Федорович ваҡытында поляктарға ҡаршы һуғышта ла, Мәскәү болаһында Мәскәү янында, шулай уҡ болаға ҡәҙәр ҙә, беҙҙең хеҙмәттә булды. Новгород янында Броницала боярин кенәз Дмитрий Тимофеевич Трубецкой менән, ә унан һуң боярин кенәз Дмитрий Михайлович Пожарский полкында беҙҙең хеҙмәттә булды».

Шулай итеп, 1611 йылда Беренсе ополчениеға ингән башҡорттар Түбәнге Новгородтан «Понизовая рать” отрядтары составында сығып китә һәм Броница янындағы һуғышта ҡатнаша. Шунан улар Мәскәү янында ҡала, ә Икенсе ополчение килеүгә кенәз Пожарский ҡул аҫтына инә һәм 1612 йылдың 22-24 август көндәрендә гетман Ходкевичтың поляк-литва атлыларына ҡаршы һуғышта ҡатнаша. Башҡортар ҡаҙаҡтар һәм төрлө ерҙән килгән һыбайлылар менән поляк-литва кавалерияһына ҡаршы тора алған, ә бит улары Европала иң яҡшыларҙан һаналған. Илгә килгән бәләнең иң ситен мәлендә, уғаса йөкмәтелгән бурыстарына тоғро ҡалып, ике мәртәбә – 1608-1610 һәм 1611-1612 йылдарҙа ҡорал көсө менән, үҙҙәренең ғүмерҙәрен фиҙа ҡылып, Рәсәй дәүләтенең бөтөнлөгөн һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итә.

**Ф.Сафин.**

*Түбәнге Болмоҙо ауылы.*

Халыҡ-ара тәмәкенән баш тартыу көнө

# Ағыулы тамырҙарҙы ҡырҡып ташлағыҙ!



**10 ноябрҙә бөтә донъяла тәмәкенән баш тартыу көнө үткәрелә. Был көндә тәмәкеселәр тартыуҙарын бер көнгә йәки күберәккә ташларға тырыша.**

Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәте буйынса, ер шарында үпкә сире менән ауырығандарҙың – 90%, бронхит менән ауырыусыларҙың – 75%, йөрәктең ишемия сире менән ауырыусыларҙың 25% тәмәке тартыу менән бәйле.

Планетабыҙҙа һәр 10 секунд һайын бер тәмәке тартыусы үлә, 2020 йылда был һан өс мәртәбәгә артасаҡ.

Рәсәйҙә ирҙәрҙең – 65%, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 30% ашыуы тәмәке тарта. Шуларҙың 80% был насар ғәҙәткә үсмер саҡтан уҡ эйә булған. Илдә үткәрелгән тикшеренеү буйынса, һуңғы 20 йылда тәмәкеселәрҙең һаны 440 мең кешегә артҡан. Тәмәке тартыусылар араһында йәштәр һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың күбәйеүе күҙәтелә.

15-19 йәштәге егеттәрҙең 40% һәм ҡыҙҙарҙың 7% был насар ғәҙәткә эйә булған. Улар көнөнә 7-12 тәмәке тарта.

Дөйөм алғанда, Рәсәйҙә 3 миллионға яҡын үсмер был «наркотик»ҡа баш эйгән.

Илебеҙҙә тәмәкенән баш тартыу көнө 1992 йылдан алып йыл һайын үткәрелә. Шуға бәйле рәүештә төрлө саралар һәм кисәләр ойошторола.

Тәмәке тартыу – бөтә халыҡтар, кешеләр өсөн бәлә. Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был насар ғәҙәттән миллионлап кеше үлә.

Тәмәке кешенең тормошона үҙ тамырҙарын йәйгән. Әммә был ағыулы тамырҙарҙы ҡырҡып алып ташлап була. Тартыуҙа ниндәйҙер дауа сараһын эҙләргә кәрәкмәй. Спортта йәки мәҙәниәттә күңел дауаһы табып була.

Йәшел дарыухана

# Иммунитетты нығытыу өсөн

**Хәҙерге ҡиммәтселек заманында витаминдарға һәм минераль элементтарға бай ризыҡтар менән дөрөҫ туҡланыу, дарыухананан иммунал препараттарҙы һатып алып эсеүгә ҡарағанда, күпкә арзаныраҡҡа төшә.**



Рационда сей йәшелсә, еләк емештәрҙең етерлек күләмдә булыуы организмдың күп төрлө инфекцияларға ҡаршы тороу һәләтен күтәрә. Бигерәк тә С витаминына (аскорбинка) бай башлы һуған, һарымһаҡ, лимон, редис, шалҡанды көҙ-ҡыш айҙарында грипп эпидемияһы көсәйгән осорҙа ҡулланырға кәрәк. Уларҙың составында аллицин матдәһе микробтарҙы юҡ итеү һәләтенә эйә. Шулай уҡ тын алыу юлдарындағы һәм һейҙек бүлеп сығарыу системаһындағы инфекцион ауырыуҙарҙың кимелен дә түбәнәйтә.

**Мөхәррир:** Р.М.Ильясов
Подписка индексы 50713.
Тиражы 419
**Редакцияның адресы:** 452360 БР, Ҡариҙел ауылы, Ленин урамы, 23.
**Адрес: ГУП РБ РИК “Караидель”** 452360 РБ, с.Караидель, ул.Ленина, 23.
**Һатыуҙа хаҡы ирекле.**

**“Хазина”**- “Караидел” гәзите ҡушымтаһы.
Ойоштороусылары:
Башҡортостан Республикаһының Элемтә һәм киң коммуникациялар министрлығы.
**БР “Караидел”** РНИК ДУП.
2003 йылдан алып, айына ике тапҡыр сыға.
**Сығарылыш өсөн**
**Люция Карамова яуаплы.**

**Телефондар:**
мөхәррир - 2-13-00,
мөхәррир урынбаҫары - 2-16-75,
яуаплы сәркәтип - 2-15-86,
факс - 2-13-00, 2-12-14, 2-16-49.
**Беҙҙең электрон почта:**
e-mail: karred@mail.ru
http://karaidel. pressarb. ru.

**БР “Бөрө ҡала типографияһы” дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.**
Подписка буйынса таратыла.
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17.11.12.10.00.
Ҡул ҡуйылды - 17.11.12.10.00.
© **“Хазина”**, №21 ноябрь, 2012.
Күләме - 1 баҫма табаҡ.
Заказ № 4848